«Киләсәк» йәштәр ойошмаһы

ПРОЕКТ

Автор: Ғүмәров Заһит, БДУ студенты

Максат:



- **Мәктәптәрҙә башкорт телен үҫтереү, балаларҙа туған телебеҙгә, мәҙәниәтебеҙгә һөйөү тәрбиәләү.**

Башкорт теле

Бурыстар:



- башҡорт телен ҡала мәктәптәре уҡыусыларына өйрәтеү
- алған белемдәрен нығытыу
- дөрөҫ һөйләргә өйрәтеү
- мәктәптәрҙә дәрестән тыш эшмәкәрлекте үҫтереү (түңәрәктәр асыу)

Белешмә

- Сая, көслө рухлы, маҡсатлы, әүҙем йәштәрҙе йәлеп итеү.
- Ойошманың урынлашҡан урыны, географик киңлеге: Өфө ҡалаһы.
- База: Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты, ҡоролтай, ҡалалағы милли мәктәптәр.
- Ойошмаға етәксе, етәксе ярҙамсыһы, пресс-секретарь кәрәк буласаҡ.

- **“Киләсәк”** йәштәр ойошмаһы Өфө ҡалаһында эшләйәсәк. Ойошма күңелендә илһөйәрлек рухы булған әүҙем йәштәрҙе үҙенә туплай. Төп өлөштө студенттар тәшкил итә, шулай уҡ эшләп йөрөүсе, эштән һуң ваҡыт табып, беҙгә ҡушылырға теләүсе йәштәрҙе лә ҡабул итәбеҙ.



Нимә өсөн кәрәк?

- Хәҙерге ваҡытта ҡаланың башҡорт мәктәптәре, гимназияларында дәрестән тыш эшмәкәрлек аҡһай, һәм шулай уҡ бик күп ата-әсәләр балаларының, башҡорт булып та, урыҫ телендә һөйләшеүенә борсола. Был ойошма ошо мәсьәләләр өҫтөндә эшләйәсәк.

Эш барышы

- Тәүҙә ойошмаға йыйылған йәштәр ҡоролтайҙың йәштәр бүлеге етәксеһе менән һөйләшеп, конкрет йүнәлештәрҙе билдәләй.
- Мәктәп директорҙары менән бәйләнешкә инеп, тәҡдимдәрҙе әйтергә. Бик күп ата-әсәләр балаларын түңәрәктәргә түләп йөрөтә. Ә беҙҙең хеҙмәт бушлай буласаҡ. Был эште студенттар алып барасаҡ.

Эште түбәндәгесә күҙаллайбыҙ:

- Дәрестән тыш эшмәкәрлекте башларға.
- Белдереү бирергә (гәзит, интернет).
- Уҡыусыларҙың исемлеген төҙөргә.
- Түңәрәктең эшмәкәрлеген башларға.
- Аҙнаһына 1-2 тапҡыр ойошторорға.
- Түңәрәктәрҙең маҡсаттарын, актуаллеген билдәләргә.
- Уларҙы заманса, ҡыҙыҡлы итеп үткәрергә тырышырға.

Ойошманың икенсе йүнәлеше

- Ойошманың икенсе йүнәлеше конкрет башҡорт теленә бәйле. Унда БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты студенттары, шулай уҡ фән кандидаттары һәм докторҙары башҡорт телен өйрәтеү буйынса һәр яҡлап ҡыҙыҡлы дәрестәр алып барасаҡ. Үткәреү урыны: БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты аудиториялары. Төп маҡсат: башҡорт телен өйрәтеү. Белдереүҙәр таратыу (гәзит биттәрендә, интернет киңлектәрендә). Аҙнаһына 2 тапҡыр. Сәғәт 18-00-20-00 тиклем.

Һығымталар эшләү

- Һәр ике ай һайын йәштәр, ҡоролтайҙа йыйылып, һығымталар яһай, тағы ла маҡсаттар ҡуя, эш һөҙөмтәләре буйынса отчет төҙөлә.

Ойошма ни өсөн кәрәк?

- Ошондай ойошма әлеге вакытта бик тә кәрәк. Сөнки, айырыуса баш ҡалала, мотлаҡ рухлы киләсәк булырға тейеш. Шулай уҡ был ойошма студенттарға ла зур ярҙам итәсәк. Улар үҙҙәрендә аудитория менән эшләй белеү, ойоштороу, әйҙәй белеү һәләттәрен үҫтерә, ғөмүмән, әүҙем тормош алып бара. Был әлеге вакытта бик мөһим.

Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!

- Проектты тормошҡа ашырһаҡ, был башҡорт теленең үҫешенә ҙур йоғонто яһар. Шуға хәҙерҙән эшкә тотонорға кәрәк!